**Башҡорт теленән диктанттар**
**(демоверсия)**
**5-се класс**
**Контроль диктант**
**Көҙгө урман**

Мин көҙгө урманда йөрөргә яратам. Уның иң гүзәл сағы сентябрь бөткәндә, октябрь баштарында булалыр. Үрмәксе ауҙары иренеп кенә йөҙгән зәңгәр күккә, йылы аяҙ көнгә урмандың төрлө биҙәк хазинаһына һоҡланып туймайһың. Тәрән тынлыҡ. Аяҡтарыңды ергә түшәлгән алтын япраҡтар иркәләй. Ә ағастар? Ниндәйҙер оло ҡарағай йәки имән ышығында үҙенең ҡыҙыллы – һарылы сыбар кейемендә йәш саған ҡупшыланып ултыра. Тағы сыбар биҙәкле япраҡтарға һарыҡҡан асыҡ ҡыҙыл емештәре менән ҡыштырлап миләш тора. Һоҡланғыс та һуң көҙгө урман!

**Контроль диктант**
**Айыу**

Айыу- беҙҙең яҡ йыртҡыс йәнлектәре араһында иң ҙуры. Уның буйы ике метрҙан да оҙон, ә ауырлығы биш йөҙ килограмға етә. Көрән айыуҙар ҡуйы урман эсендә йәшәй. Айыу иҫ киткес көслө. Ул алғы аяғы менән һуғып аттың, мышының һыртын еңел һындыра ала. Уның атлауы ла үҙенә бер төрлө: аяғының үксәләрен ситкә тарбайтып, бармаҡтарын эскә ҡаратып баҫа. Ул шәп йүгерә, яҡшы йөҙә.

**Контроль диктант**
**Урманда**

Ҡайын урманын бәшмәктәр ҙә ярата. Иң мул булып үҫкәне-ҡайын бәшмәктәре инде. Улар эшләпәнең аҡһылын, һарыһын, көрәнен- төрлө төҫтәгеһен кейә. Ҡайынлыҡта бүтән бәшмәктәр ҙә етерлек үҫә. Күҙҙең яуын алырлыҡ тулҡынҡайҙар тигән бәшмәктәрҙе лә осратырға була. Аҡһыл ерлектә алһыу тулҡындар кеүек һыҙыҡтар булғанға,ул шулай атала. Бында әтәс бәшмәктәр ҙә бар. Былары ҡупшы әтәстәргә оҡшаған. Нисә төрлө бәшмәк бар- барыһы ла ҡайынлыҡты һөйә. Ә ҡайынлыҡта үҫкән аҡ бәшмәктәрҙе мин бәшмәктәр батшаһы тип атар инем.

**6 класс**
**Контроль диктант**
**Талҡаҫ күле.**

Юлдаш менән Ҡыҙырас аяҡтарын күлдең йомшаҡ ҡомона батырып,оҙаҡ ултырҙылар.Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.Иртәнге һауала тауыш көслө яңғырай.Унда,Һаҡмар буйында,трактор геүләй.Һулда комбайн шаулай.Алыҫта йәштәрҙең йырлаған,көлгән тауыштары ишетелә.Оло юлдан иген,мәғдән тейәгән машиналар өҙлөкһөҙ үтә.Бейектә самолет күренә.Ул Өфөнән Баймаҡҡа почта илтерә.
Ә бында Талҡаҫ күле.Ул тып-тын ята.Күлдең уртаһында,күкһел томан эсендә,Уртаташ күренә.

**Контроль диктант**
**Матурлыҡ.**

Кешенең эске һәм тышҡы матурлығы була.Әммә уның нигеҙендә сәләмәтлек ята.Шуға ла йәштән үк гигиена талаптарын теүәл үтәргә кәрәк. Һәр иртәне гимнастиканан башлау,һалҡын һыу менән йыуыныу,тәнде ҡаты таҫтамал менән ышҡыу көндәлек ҡағиҙәгә әйләнергә тейеш.Ундай кеше грипп ,ангина менән ауырымай,эшкә һәләтлеге арта,кәйефе лә була.

Битеңде генә түгел,муйынынды ла,колаҡтаҙы ла һабынлап йыуырға онотторға ярамай.Мәктәптән ҡайтып,урамда уйнап кергәс,ҡулдарҙы һабынлап йыйырға кәрәк.Был кешенең тәрбиәлелеген күрһәтә.

**Контроль диктант**

**Урманда янғын.**

Июлдә эҫе көндәр башлана. Йылы ямғырҙар яуа. Ләкин йәшенле ямғырҙар ҡайһы ваҡыт бәлә лә килтерә. Йәшен һуғыуҙан ҡарағай, ҡарағас һәм башҡа бейек ағастар тоҡанып китәләр. Урманда янғын бик ҡурҡыныс. Утта йәш үҫемлектәр, еләклектәр, ҡош, йәнлек оялары юҡҡа сыға. Ас ҡалған йәнлектәр күпләп һәләк булалар. Халыҡ хужалығына ҙур зыян килә.

Балалар,урмандарҙы янғындан һаҡлағыҙ!

**7 класс**

**Контроль диктант**

**Ағиҙел**

Ағиҙел – республикабыҙҙың иң ҙур йылғаһы. Урал тауы итәгенән башланып, ул Башҡортостан аша 1400 километр самаһы ер үтә һәм бик күп йылғаларҙың һыуын үҙенә йыя. Ағиҙел буйында Белорет, Күмертау, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Бөрө ҡалалары теҙелгән. Колхоз, совхоз баҫыуҙары йәйелеп ята. Ағиҙелдә иген, ағас, нефть һәм пассажирҙар тейәгән ҙур пароходтар,теплоходтар, баржалар, катерҙар йөрөй. Йылғаның аҡ тулҡындарына, бейек ҡаяларына, унда үҫкән ҡалын урмандарына, йәшел туғайҙарына һоҡланмаған кеше юҡ. Бына ниндәй ул йылғалар әсәһе Ағиҙел!

**Контроль диктант**

**8 класс**

**Башҡорт милли аш-һыуҙары**

Милли аш- һыу башҡорттарҙа малсылыҡ хужалығы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Туҡланыуҙа һөт һәм һөттән яһалған ризыҡтар мөһим аҙыҡ булған. Һөттө айыртып, ҡаймаҡ, ҡаймаҡтан май яһағандар. Ҡышҡылыҡҡа сейә майлағандар. Айыртылған һөттән ҡатыҡ ойотҡандар. Уны күп итеп йыйып ҡайнатып, ҡорот эшләгәндәр. Ҡатыҡтан йәй көндәрендә айранда яһап эскәндәр. Ул һыуһынды ҡандыра.
Башҡорттарҙың милли аш-һыуында итле ризыҡтар ҙа ҙур урын тотҡан. Иттән тултырма, ҡаҙы эшләгәндәр, бишбармаҡ, һалма бешергәндәр. Итле аштан һуң ҡоротлап һурпа эскәндәр.

Борон-борондан башҡорттарҙың көндәлек ризығында иген аҙыҡтары урын алған. Ҡурмас, талҡан эшләгәндәр, бауырһаҡ, ҡоймаҡ, күмәс һәм башҡа ризыҡтар бешергәндәр.

**Контроль диктант**

**Бәхетле ҡартлыҡ.**

Ҡунаҡтар оҙаҡ көттөрмәнеләр, иң элек ҡарсығы менән Ғариф
ағай килде. Бригадир ҡунаҡҡа барғанда ғына һандыҡтан сығара торған төлкө тунын, ҡама бүркен аяғына яңы быймаһын,кейеп, билен яҫы билбау менән ҡымтып быуған. Ҡунаҡҡа барған саҡта ҡупшы кейенеү – уның яратҡан ғәҙәте.Берҙән, ул быға кеше алдында үҙенде һынатмау, икенсенән, үҙҙәрен саҡырыусы хужаларҙы хөрмәтләү тип ҡарай. Шулай уҡ, унынса, ҡунаҡҡа күстәнәсһеҙ барыу ҙа ҙур мөрәүәтһеҙлек һанала; уның был ҡылығын ҡарсығы Мәғфиә лә күптән үҙ итеп бөткән инде, ул да биш билле әҙрәс бишмәттән, эре суклы ҡалын шәлдән ине.
Улар иҫәнлек – һаулыҡ һораштылар. Шул арала уҡ Ҡадир, уларҙы ололап, сисендерә башланы. Ғариф ағай:

-Иртә килгән урын өсөн, һуңға ҡалған тамаҡ өсөн, - тип һөйләнә – һөйләнә, түр башына менеп тә ултырҙы.

**Контроль диктант**

**Ағиҙел буйҙарына яҙ килде**

Тау битләүҙәре генә түгел, тигеҙ ерҙәрҙең дә бик күп өлөшө ҡарҙан асылғас, Иҙелдә боҙ асылды. Беҙ был ваҡиғаны бик күптән түҙемһеҙләнеп көтә инек инде. Йәй көндәрендә тыныс ҡына ағып яткан таҙа һыулы тыйнаҡ йылға, нимәгәлер ҡаты асыуланып йөҙөнә ҡара ҡойған шикелле, һыуын ҡуйыртҡан да ҡыш буйы өҫтөн томалап баҫып торған ҡалын боҙҙарҙы емереп,тулай башлаған. Үҙенең өҫтөндә ҙур-ҙур боҙ киҫәктәрен юнысҡы һымаҡ өйөрөп, ярға һыйынып торған бер тағы ла ҙурыраҡ боҙға килтереп бәрә лә, дөбөрләп, боҙ өҫтөнә боҙ мена.

**9 класс**

**Контроль диктант**

**Ер**

Ниндәй таныш беҙгә был ер! Бына тау. Бөтә тигеҙлектәр өҫтөнән ҡалҡып, тирә яғын мәғрүр күҙәтеп тора ул бейектау. Ул тыныс. Ләкин ошо тыныслыҡ аҫтында аҙмы ни дауыллы көндәр. Бына урман. Меңләгән ваҡ һәм эре тормоштоң бөтә тауыштары менән шаулап тора ул урман,һәм ошо тыйып алғыһыҙ шау аҫтында аҙмы ни дәһшәтле аҙналар һаҡланған! Бына йылға. Тулҡындар теле менән яр ташып тәмләп ҡарай-ҡарай аға ул йылға. Ә йылғаның теге һәм был яҡ ярҙарында, онотолмаҫлыҡ иҫтәлек булып, аҙмы ни тулҡынҡайҙар һаклана! Был-ер. Яҡын да был ер, йылы ла был ер, һөйөклө лә был ер.

**Контроль диктант**

**Бал.**

Боронғо Грецияның атаҡлы математигы Пифагор балдың кеше ғүмерен оҙайтыуы тураһында яҙып сыҡкан.Үҙе лә балды йыш ашаған һәм 90 йәшкә тиклем йәшәгән.
Шулай уҡ боронғо грек философы Демокрит та 100 йылдан артыҡ йәшәгән.Ул да балдың сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуын әйткән.Атаҡлы табип Әбуғалисина йәшлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән.
Юҡка ғына әйтелгән һүҙҙәр түгел былар.Балда 60-ҡа яҡын төрлө матдә бар.Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп.Ә улар-йөрәк мускулдарының нормаль эшләүе өсөн бик кәрәк матдәләр.
Бал витаминдарға ла бик бай.Уны һыуҙа иретеп,шуның менән ауыҙ сайҡайҙар.Һөҙөмтәлә күп кенә микробтар юҡка сыға.